## Ислам әҙәбе

# ӘГӘР КЕШЕНЕҢ ЙӨРӘГЕ ЙОҠЛАҺА...

Бер сит ил кешеһе юл буйлап уйланып китеп барған саҡта уның ҡаршыһына ҡыр хайуаны килеп сыҡҡан. Ул ҡурҡышынан ҡасып яҡындағы ҡоҙоҡ эсенә һикергән. Ҡоҙоҡтоң төбөнә ҡолап барған ыңғайы, ҡоҙоҡ ҡоймаһына сығып торған ағас олонона йәбешкән. Был ағас олонон туҡтауһыҙ ике сысҡан кимерә икән. Уларҙың береһе аҡ, икенсеһе ҡара булған. Ҡоҙоҡ төбөндә ниндәйҙер ҡурҡыныс йән эйәһе уны йоторға әҙерләнгән. Ҡайҙандыр ике йылан килеп сыҡҡан һәм ҡоҙоҡ төбөндә уның үҙҙәренә ҡолап төшөүен түҙемһеҙләнеп көткән. Кеше үлем һәм йәшәү араһында торған, бөйөк ҡурҡыу тойғоһо уның бар тәнен солғап алған. Уның хәле тиҙ генә уйлауҙы һәм тиҙ эшләүҙе талап иткән. Бер генә минутты ла юғалтырға кәрәкмәгән. Сысҡандар ағас олонон кимереп бөтмәҫ борон, уға был ҡоҙоҡтан ҡотолорға кәрәк ине. Үҙенең хәлен уйлап, кеше тирә-яғына күҙ ташлаған. Ә унда нимә күргән, Баллы кәрәҙҙәр… Ҡасандыр бал ҡорттары был ағастан бал йыйған. Кешелә балды тәмләп ҡарау теләге уянған. Татлы балдан алдан уҡ ләззәтләнеү хыялы уның башҡа тойғоларын юҡҡа сығарған. Хуш еҫле бал уның аңын яулаған. Ул үҙ алдына: ”Быңдай урында шундай саф һәм хуш еҫле бал… урыны түгел…, әммә шулай ҙа уны тәмләп ҡарағы килә, ә һуңынан ваҡытты юғалтмайынса өҫкә үрмәләрмен”. шулай итеп, ул үҙенә бер аҙ ләззәтләнергә ваҡыт биргән. Бал уға шул тиклем оҡшаған. Ул ләззәт-ләнеүҙе һуҙып һыйланған һәм былай тип уйлаған: ”Шундай тәмле бал, мин быңдайҙы тағы ҡайҙа тәмләй алам. Миңә килеп эләккән икән, туйғансы ашайым әле”. Татлы ләззәткә бирелеп, ул үҙенә янаған ҡурҡыныс хаҡында онотҡан һәм үҙенең нисек ҡотолоуы тураһында уйламай башлаған. Әммә уның шундай хәле егәрле сысҡандарҙың һәм һағайып үҙенең ҡорбанын көтөүсе йыландарҙың эшмә-кәрлеген бер нисек тә туҡтатмаған. Һәм ниһайәт, сысҡандар үҙҙәренең эшен бөтөргән, олон емерелгән һәм бәхетһеҙ кеше үҙенең үлемен ҡоҙоҡ төбөндә тапҡан.

Был ғибрәтле хикәйә кеше һәм уның ғәмһеҙлеге хаҡында. Унда күп кенә символик образдар бар. Ҡоҙоҡ ерҙәге тормошто һүрәтләй, ҡоҙоҡта көн күреүселәр - ләззәтләнеп алыу теләген (нәфсе) символләштерә, ҡара һәм аҡ сысҡандар - көн менән төн, йәғни кешенең ғүмерен йотоусы ваҡыт, был - ерҙәге алдаҡсы ләззәттәр. Сит ил кешеһе - был ергә һынау өсөн ебәрелгән һәм үҙенең онотоусанлығы һәм ғәмһеҙлеге арҡаһында һәләк булыусы кеше образы. Был мәҫәлдә һүрәтләнгән кеше хәленә ҡалмаҫ өсөн һәр кеше аңлы булырға, ғәмһеҙлеккә төшмәҫкә, ҡотолоу юлын эҙләргә тейеш. Тәбиғәт үҙе кешенән шундай тәртипте талап итә. Кеше үҙенең тәҡдиренә тура килгәнсә ғүмер уҙғарһа, бәхетле һәм ҡәнәғәт булыр. Һәм кешенең бәхете үҙенән йәшәү мәғәнәһен һәм яратылыу сәбәбен ни тиклем аңлауынан һәм тормошон нисек төҙөүенән, ауырлыҡтарға ҡаршы тора белеүенән дә тора. Әгәр ҙә кеше үҙенең йөрәгенә юлды онотһа, ғәмһеҙлек йоҡоһона бирелһә, күңел ҡиммәттәрен ергә һалып тапаһа, тулы тормош урынына уны дауамлы ғазаптар, әсенеүҙәр һәм ауыртыуҙар тулы күңелһеҙ тормош көтәсәк, уның аҙағы ҡурҡыныс булыр. Тормошта үҙендең урынынды белмәй, тыуыуҙың һәм үлемдең мәғәнәһен аңламай, нәфсенең тәбиғәтен һәм хәҡиҡәтен белмәй йәшәү ни тиклем әсе ғәмһеҙлек. Быңдай аҙашыуҙарҙа йәшәү, тимәк был ерҙә мәңгелек тормошҡа әҙерләнеүҙең ҙур мөмкинлеген ҡулланa белмәү күренә. Йөрәктәре тураһында Ҡөрьәндә әйтелгәндәрҙең хәле ни тиклем аяныслы: ”Аллаһты зекер итә алмаҫлыҡ булып, күңелдәре ҡатҡандарға яҙыҡтар булыр! Көн кеүек асыҡ, улар тура юлдан яҙып аҙашҡан” (”Әз-Зүмәр”, 22).

Кеше күңеле менән йоҡлаған ваҡытта уның бөтә аңы билдәһеҙ йоҡоға тала. Ул тик ерҙәге, мәңгелек күҙлегенән ҡарағанда мәғәнәһеҙ нәмәләр өсөн генә уяу була, тик ер байлыҡтары өсөн генә дәртле булып ҡала. Һиҙгерлеге, фекер тәрәнлеге, тойоу, зирәклек уны ташлай. Ул тура юлдан барған ваҡытта хәлһеҙлек күрһәтә. Гонаһтары, еләҫ ел кеүек, уны наҙлап үтә. Кеше һаңраулана һәм үҙенең гонаһтарын да һиҙмәй, сафлыҡты гонаһтан айыра алмай башлай.

Улар үҙҙәренең гонаһта йәшәгәнен һәм үҙҙәре тирәләй гонаһ тулҡындарын таратҡанын һиҙмәйҙәр. Ғәмһеҙлек уларҙы шул тиклем сорнап алған, улар үҙҙәрен һаңрауҙар һәм һуҡырҙар кеүек тота. Аллаһы Тәғәлә улар тураһында: ”Улар һуҡыр һәм телһеҙ - һаңғырауҙар. (Шуға күрә улар тура юлға) әйләнеп ҡайта алмайҙар”, - тигән (”Баҡара”, 18).

Билдәле шағир-суфый һәм дин остазы Йәләлетдин Руми ”Мәснәви” йыйынтығында килтерелгән бер-береһен ишетмәгән һәм аңламаған ике кешенең тарихында тормошто тик үҙенсә генә аңлаған кеше аңының яртылыш ойоуын образлы һүрәтләй. Тарих шундай. Бер кеше үҙенең танышынан, ни өсөн уның ауырыу күршеһенең хәлен барып белмәүе тураһында һорашҡан. Танышы ҡолаҡҡа ҡатыраҡ һәм өҫтәүенә бер аҙ иҫәрерәк тә булған. Шулай ҙа бер нисә көндән һуң вайымһыҙ күрше уйға батҡан, һөҙөмтәлә үҙе тураһында бөтәһе лә насар уйлауы мөмкин тигән фекергә килгән һәм күршеһенә бара ҡалһа, улар араһында буласаҡ диалог планын төҙөгән. Үҙенең ишетмәгәнлеген ауырыуға күрһәтмәҫ өсөн, күршеиҫ киткес диалог төҙөгән, ауырыуға шул тиклем иғтибарлы ҡараштa булғаны өсөн үҙен маҡтауҙарға лайыҡлы, изге күңелле барлыҡ тип тойоп ҡәнәғәт ҡалған. Һаңғырау нисек булһа ла үҙенең етешһеҙлеген йәшерергә теләгән һәм уға нимә әйткәнен яҡынса булһа ла аңлау өсөн ауырыуҙың ирен хәрәкәттәрен күҙәтеп ултырырға ҡарар иткән. Ул ауырыуға үҙенең һүҙҙәрен ятлап килгән. Күҙаллауы буйынса, барыһы ла ул уйлағанса килеп сығырға тейеш булған. Һаңғырау: ”Ҡәҙерле күршем, һеҙ үҙегеҙҙе нисек тояһығыҙ?” - тип һорайасаҡ. Ауырыу: ”Рәхмәт, мин үҙемде күпкә яҡшыраҡ тоям”, - тип яуап бирәсәк. Һуңынан һаңғырау: ”Берәй нәмә ашаныңмы?” - тип һорайасаҡ. Ауырыу хәлһеҙ тауыш менән яуап бирәсәк: ”Мин татлы шәрбәт эстем һәм бер аҙ аш ашаным”. Һаңғырау: ”Ашаған ашың сәләмәтлегеңә булһын!” - тип ҡотлаясаҡ. Һуңынан тағы ла ауырыуға һорау бирәсәк: ”Ҡайһы врач һине ҡарарға килә?” Ауырыу яуап бирәсәк: ”Фәлән-фәлән килә”. Һуңынан һаңғырау: ”Эйе, был врач яҡшы белә. Уны саҡырып дөрөҫ эшләгәнһең, тимәк ул килгәс, барыһы ла яйға һалынасаҡ”...

Үҙ-үҙенән ҡәнәғәт ҡалған һаңғырау, үҙен иғтибарлы күрше итеп күрһәтеү маҡсатында ауырыуҙың хәлен белергә киткән. Һәр кешелә яҡшы булып күренеү теләге бар шул.

Ауырыуҙың өйөнә килгәс тә план буйынса: ”Ҡәҙерле күршем, һеҙ үҙегеҙҙе нисек тояһығыҙ?” - тип һораған. Күршеһе ауыртыныуҙан ҡалтырап саҡ яуап биргән: ”Хәлем шул тиклем насар, мин үлеп барам шикелле”. Ләкин яуапты һаңғырау ишетмәгән һәм өйҙә төҙөгән диалогын дауам итеп: ”Аллаһҡа рәхмәт”, - тигән. Был һүҙҙәр ауырыуға оҡшамаған. Ул үҙ алдына әсенеп былай тип уйлаған: ”Ни өсөн күршем миңә изгелек теләмәй. Ул минең үлеүемде теләйме”. Ә һаңғырау үҙенең бурысын үтәүҙе дауам иткән һәм уға тағы ла һорау биргән: ”Берәй нәмә ашаныңмы?” Үпкәләгән күршеһе: ”Һин мине әле генә ағыу менән туйҙырҙың”, - тигән. Һаңғырау быға әҙерләнгән тексы буйынса: ”Тәмле булһын!” - тигән. Ауырыуҙың шул тиклем йәне көйгән. Ул әҙ белемле һәм тәрбиәле кешеләр араһынан булмаған. Һаңғырауҙың һорауҙары дауам иткән һәм ул: ”Кем һине ҡарарға килә?” - тип һораған.

Үҙенең һуңғы көстәрен йыйып, ауырыу асыуланып яуап биргән: ”Миңә Ғазраилдан башҡа тағы ла кемдең килеүе мөмкин! Һин күршем, мин әле асыуланмаҫ борон, үҙ юлың менән китһәң ине”.

Әммә һаңғырау әңгәмәсеһен ишетмәгән, шуға уның хәлен дә аңламаған. Ул үҙ донъяһынан сығып, тыныс ҡына һорауҙар биреүҙе дауам иткән. Еңелсә башын һелкетеп былай тип уйлаған: ”Минең килгәнемә ҡыуан”, һәм үҙенең бурысын үтәүҙән ҙур ҡәнә-ғәтлек алып, ауырыуҙан тағы икенсе юлы килергә рөхсәт алып китергә уйлаған. Өйҙән сыҡҡас, үҙ-үҙенә ҡәнәғәт булып: ”Ҡалай барыһы ла яҡшы килеп сыҡты. Мин күршемдең хәлен белдем, хәҙер береһе лә минең турала насар уйламаясаҡ. Был бәхетһеҙҙе лә ҡыуандырҙым”, тип уйлаған. Ә ысынында барыһы ла икенсе төрлө булған. Һаңғырау сауап ҡаҙанмаған, тик үҙен бөлгәнләккә генә төшөргән. Ауырыу ҙа уның килеүенән һуң әрләшкән, ҡара һүҙҙәр менән күршеһенең ҡылығын һүккән: ”Мин уны яҡшы кеше тип уйлап йөрөһәм, ул минең дошманым килеп сыҡты. Мин уны шундай яуыз, насар уйлы икән тип уйламаным да!” Бынан һуң ауырыу оҙаҡ ҡына күршеһен ҡарғаған. Ул һуңғы көсөн йыйып, мендәренән саҡ башын ҡалҡытып ҡысҡырған: ”Шулай булыуы мөмкинме һуң! Ауырыуға дәрт бирер өсөн киләләр. Ә был кеше минең һуңғы көстәремде һурыр, минән нимә өсөндөр үс алырға килгән. Ә мин уны бер ҡасан да үпкәләтмәнем”… Шулай итеп уның физик ауырыуына рухи ауырыу ҙа өҫтәлгән.

Һаңғырау яҡшы булып күренергә теләгән. Үҙенең иҫәрлеге арҡаһында ул ауырыу йөрәгенә ут ташлаған. Ул ихласһыҙлығы арҡаһында һәм кешеләргә яҡшы булып күренеү маҡсатында гонаһ эшләгән. Шулай итеп ул үҙе лә белмәйенсә, күрше хаҡын боҙған. Ә ауырыу үҙен үҙе тота алмаған һәм шуның менән һыналған. Һаңғырау хәленең сәбәптәрен аңларға тырышыу урынына, ул уны тикшерә башлаған һәм үҙен күрергә килеүсе тураһында насар уйлаған. Ҡара уйҙарға төшөп үҙ-үҙенә зыян килтергән.

Эштәрен Аллаһы Тәғәләнең ризалығы өсөн түгел, ә үҙҙәренең баһаһын арттырыу өсөн башҡарған кешеләр әллә күпме! Улар ғибәҙәттәрен дә тиҙ генә сауап эшләп, Ожмахҡа рөхсәт алырға уйлап нәфсегә бутап башҡара. Быңдай кешеләр был осраҡта йәшерен гонаһ һәм бәләкәй ширҡ эшләйҙәр: Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн башҡарылмаған һәр төрлө ғибәҙәт гонаһлы. Башҡалар күрһен өсөн ҡылынған намаҙ, тыштан ҡарағанда намаҙ ҡылыуға оҡшаһа ла, эстән ширҡ менән буялған. Һауыттағы һыуҙы һаҫыҡ шыйыҡ-лыҡтың тамсыһы бысратҡан кеүек, йоҡлаған һәм ғәмһеҙ йөрәк менән башҡарылған ғибәҙәт тә шулай уҡ бысранған була. Кеше ҡолаҡтары ишетер, күҙҙәр - донъяны күрер өсөн тәғәйенләнгән. Ә тик Аллаһы Тәғәләнең ниғмәттәрен генә күргән һәм Раббының серҙәрен сискән йәшәйештең йәшерен мәғәнәләрен һәм тауыштарын ишетеүсенең йөрәк зирәклеге ниндәй хәлдә була,

Мәүләнә былай тип кәңәш биргән: ”Әгәр ҙә һине йоҡо баҫһа, Аллаһы Тәғәлә юлында йоҡла, Хәҡиҡәт юлынан сыҡма. Һин Аллаһы Тәғәлә юлында йоҡлаған ваҡытта, бәлки һиңә таҙа күңелле һәм камил хәйерле юлдаш тап булыр һәм һине йоҡондан уятып Хәҡиҡәткә килтерер. Йөрәк ҡол ризалығы өсөн түгел, ә Аллаһ ризалығы өсөн типһә, ниәттәр ҙә, эштәр ҙә ҙур мәғәнәгә эйә була. Шулай булғас, йөрәкте ғәмһеҙлектән һәм йоҡолоҡтан ҡотҡарыр өсөн, йөрәкте был донъялағы ығы-зығынан таҙартырға һәм сафлыҡ менән тултырырға кәрәк. Риүәйәт буйынса, бер ваҡыт Юныс (ғәләйһи сәләм) Ябраил фәрештәнән (ғәләйһи сәләм): ”Миңә ерҙәге иң ихлас кешене күрһәт”, -тип һораған. Фәрештә махау ауырыуы менән ауырыусыға күрһәткән. Уның аяҡтары был ауырыуҙан серегән һәм күҙҙәр юғалған булған. Ул ”Эй, минең Аллаһым! Был аяҡ һәм ҡулдар аша бирелгәндәрҙең барыһын да һин бирҙең. Мин нимәнән сикләтелһәм дә, тик һинең Бөйөклөгөң менән. Эй, минең Аллаһым! Һин минең йөрәгемдә бер генә ниәт ҡалдырҙың: һинең менән берләшергә!”.

Аҡыл эйәһе әйткән: ”Эй, хәҡиҡәт юлындағы юлдашым! Сабырһыҙлыҡты сабырлыҡ, онотоусанлыҡты зикр, яуызлыҡты изгелек, боласылыҡты күндәмлек, һаранлыҡты йомартлыҡ, шикләнеүҙе ышаныс, ике йөҙлөлөктө ихласлыҡ, ялғанлыҡты дөрөҫлөк, ғәмһеҙлекте фекерләү, кирелекте гонаһтар өсөн тәүбә итеү менән алмаштырмайынса, һиңә был юл буйлап китеүе ауыр буласаҡ”.

Бер ваҡыт Джунайд Бағдади йыназа намаҙы башҡарған ваҡытта кәрәккәнсә дүрт түгел, ә биш тәкбир әйткән. Йоланы үтәп бөткәндән һуң мосолмандар уға: ”Эй, Джунайд, йыназа намаҙы уҡыған ваҡытта биш тәкбир әйтелмәй. Ни өсөн һеҙ улай эшләнегеҙ?” - тип мө-рәжәғәт иткән. Джунайд Бағдади былай тип яуап биргән: ”Дүрт тәкбирҙе мин мәрхүм кеше өсөн башҡарҙым. Ә бишенсе тәкбирҙе мин был мәрхүмдән дә үлерәк тереләр өсөн башҡарҙым. Бәлки улар аңлар-ҙар һәм үлем килгәнсе уянырҙар”.

Абдуллах бин Бушр (радиаллаху анх) бер ваҡыт Мөхәммәт пәйғәмбәргә (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) һорауҙар биреү өсөн ике бәдәүиндең килеүе тураһында һөйләй. Уларҙың береһе Пәйғәмбәргә (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) мөрәжәғәт иткән: ”Эй, Аллаһ бәйғәмбәре! Кешеләрҙән кем иң яҡшыһы һәм изгеһе?” Бәйғәмбәр (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм): ”Кемдең ғүмере оҙон һәм уның күп изге эштәр эшләүе”. Икенсе бәдәүин һораған: ”Һин мине шул эшкә өйрәт”. Пәйғәмбәр (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм): ”Һинең ауыҙың Аллаһы Тәғәләне иҫләүҙән һәм зикрҙан тулы булһын”, - тип әйткән. Ҡөрьәндә әйтелә: ”Иртәләрен, кистәрен үҙ алдыңа, ҡаты булмаған тауыш менән, ялбарыу менән, ҡурҡыу менән Раббынды иҫкә ал (ғибәҙәт ҡыл, намаҙ уҡы)” (”Әғрәф”, 205).

Аллаһы Тәғәлә беҙгә рух дәртлелеге, аң таҙалығы һәм йөрәк уяулығы яуларға һәм юғалтмаҫҡа ярҙам итһен. Әмин!



***”Золотой родник” журналынан алынды.***